*Динара КӘРИМОВА*

# Барыһы ла алда әле



*Илдар Сәйетов*

«Театрҙа яңы спектакль!» Был хәбәр шунда уҡ театр һөйөүселәр араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята — театр донъяһында яңылыҡ көтөүселәр әҫәрҙең ҡуйылышы, темаһы менән ҡыҙыҡһына, артистарҙың ижадын күҙәтеп барыусылар уларҙың яңы ролдәре менән таныша, ҡайһы берәүҙәр иһә сәхнә әҫәре хаҡында хәбәрҙәр булыр өсөн булһа ла килә театрға. Шулай, премьера хәбәре тиҙ арала йәмәғәтселекте урап сыға.

Авторҙың, режиссерҙың уй-ниәттәрен тормошҡа ашырып, тамашасының күңел ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүсе зат — актер иңенә һәр спектакль һайын — премьера булһынмы, ағымдағы тамашамы — иң яуаплы бурыс төшә. Күренекле бер сәнғәт әһеле: «Театрҙың һоҡландырғыс көсө актерҙың тилбер, ашҡыныулы йөрәк ҡеүәһенә нигеҙләнә», — тигән. Ысынлап та, сәхнә — актер тыуҙырған йәнле образдан башҡа йәнһеҙ мөхит ул.

Сәнғәт донъяһына хеҙмәт иткән актер — тәғәйен ролен ятлап, сәхнәлә килештереп һөйләп сығыусы ғына түгел, ул да ҡәҙимге әҙәм балаһы, әммә күңеле менән һиҙгерерәк, нескәрәк, эске донъяһында күптәрҙең күңел һандығын асып бирерлек хазина туплаған кеше. Артистың уйнаған ролен ышандырырлыҡ, тормошсан итеп тамашасы күңеленә еткерә алыу һәләте, таланттан һәм тырышлыҡтан тыш, тағы ана шул күңел байлығына ла нигеҙләнә... Актерҙар менән әңгәмә ҡорғанда, уларҙың ижады менән яҡындараҡ танышҡанда һәр ваҡыт улар йөҙөндә үҙең өсөн өр-яңы донъя асаһың, эске булмыштары һоҡландыра һәм ҡыуандыра.

Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Сәйетовты бөгөнгө көн репертуарындағы бик күп спектаклдәрҙә, театраль тамашаларҙа күрҙем мин, уның быға тиклемге ижад юлы менән дә бер ни кимәлдә танышмын һәм шунан сығып, Илдар Ширҡәт улының шәхсән сифаттары араһынан иң элек уның сабырлығын, ныҡышмаллығын һәм егәрлелеген һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем.

Ныҡышмал егет үҙ маҡсатына ирешеү өсөн йәштән үк бар көсөн һала. Тәүҙә Свердловскиҙағы (хәҙер Екатеринбург) театр училищеһына юл ала, унда тәүге уңышһыҙлыҡҡа юлыҡҡас, тыуған яғына ҡайтып, Баҡалы кирбес заводына эшкә урынлаша. Һуңынан шоферлыҡҡа уҡый һәм армия сафына алына. Хәрби хеҙмәтен үтәп ҡайтҡан Илдар йәнә Свердловскиға юл тота, әммә тағы юлы уңмай егеттең. Шулай ҙа ул төшөнкөлөккә бирелмәй — Өфөгә килә, ағаһы аша танышҡан артист Валерий Терентьев уны Республика рус дәүләт драма театрына столяр итеп эшкә урынлаштыра, унан инде ҡораусы, яҡтыртыусы һөнәрҙәрен дә үҙләштерә... Был ваҡытта рус драма театрында Л.В.Левитин

директор, ә Ғабдулла Ғиләжев баш режиссер булып эшләй. Ул осорҙа театрҙа бер мәл өс Илдар булып китә — Илдар Сәйфуллин, Илдар Сәйетов һәм Илдар Ғиләжев. Өсәүһен бутамаҫ өсөн, Ғабдулла Ғабдрахман улы уларҙың һәр береһенә һан һуғып сығып, яктыртыусы Илдар Сәйетовты «Илдар №2» тип йөрөтә. Әммә бер аҙҙан Илдар ғаилә хәлдәре буйынса тыуған яҡтарына ҡайтып китә.



*"Аk канатлы хыялым" спектакленән күренеш. Великатов — И.Сәйетов*

Тормош йөгө ауырайһа ла, Илдар хыялынан баш тартмай, Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетында актерҙар әҙерләү бүлеге асылыуы хаҡында хәбәр алғас та юлға сыға һәм шул махсус курсҡа уҡырға инә, айына бер мәртәбә килеп, сәнғәт серҙәренә төшөнә башлай. Тырышлыҡ бушҡа булмай — бер йылдан ул актерҙар бүлегенә (рус төркөмөнә) уҡырға инә. Александр Федеряев, Владимир Латыпов, Татьяна Макрушина, Ирина Агашкова, Лиза Устюжанина, Ирина Чуриковалар менән бергә уҡый, остаздары — курстың художество етәксеһе П.Р.Мельниченко, педагог-кураторҙары А.К.Лощенков була, Т.Ш.Хоҙайбирҙина, С.Т.Кусимова кеүек күренекле театр белгестәре, буласаҡ артистарҙы театр донъяһы менән яҡындан таныштыра.

— Әле генә Өфө дәүләт сәнғәт институтына уҡырға ингән студент инем, ә шул йылдарҙан алып күпме ваҡыт үткән! — тип хайран ҡала артист, үткәндәрен барлап. Бына ике тиҫтә йылдан ашыу Илдар Ширҡәт улы Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләй. Үткән йылдар, уйнаған ролдәр — һәммәһе лә артист өсөн күҙ асып йомған ара кеүек кенә, әммә күңеле шуға инанған — ул һөнәрен дөрөҫ һайлаған.

Театр!
Уйландырған да һин, моңландырған да һин!
Мин ни ҡылыр инем, йә, һинһеҙ?
Һине белмәй, күрмәй йәшәһәм, мин
Булыр инем ниндәй бәхетһеҙ!

Шағир һәм драматург Рафаэль Сафиндың был һүҙҙәре артист Илдар Сәйетовтың да эске кисерештәренә тап килә. Ысынлап та, бөгөн ул үҙен башҡа һөнәр эйәһе итеп күҙ алдына ла килтермәй. Уның өсөн иң ҙур бәхет — тамашасы алдына сығыу, замандаштарына сәхнәнән мөрәжәғәт итеү һәм ошо йәнле аралашыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереү.

Артист башҡарған хеҙмәтенән йәм дә, тәм дә таба белә. Үрҙә әйткәнебеҙсә, һәр артист бер ни кимәлдә кешенең күңел донъяһын байҡаусы психолог та ул. Илдар Ширҡәт улы ла өлөшөнә төшкән һәр роль менән яҡындан танышып, геройҙың биографияһын үҙенсә «яҙып», шунан ғына тамашасы хөкөмөнә алып сыға.

«Әгәр роленде яратмаһаң, тамашасы быны шунда уҡ һиҙә, шуға күрә сәхнәгә алып сыҡҡан һәр бер геройында үҙенең «мин»ендә тойорға кәрәк, ул геройҙа — һинең буй-һының, һиңә генә хас хәрәкәттәр... Һәр ролдә артистың ҡултамғаһы була, әммә шул уҡ ваҡытта геройҙарҙың төрлө икәнлеген оноторға ярамай», — ти артист. Бөгөн Илдар Сәйетов төпкөл бер ауылда йәшәүсе ир-егет ролен уйнай, иртәгә — Парижда барған ваҡиғалар уртаһында ҡайнаусы француз, иртәгәнән һуң — Америка дауаханаһында ятыусы психик ауырыу, ә унан һуң Италия балыҡсылары тормошоноң уртаһында ҡайнай... Ул уйнаған геройҙарҙың һәр ҡайһыһы зиһен көсө, фекер тәрәнлеге һәм ижади һығылмалылыҡ талап итә. Был сифаттарҙың барыһы ла актерҙа бар, шуға күрә лә режиссерҙар уның менән бик теләп эшләй, шулай булмаһа, уның ижад галереяһында шул тиклем геройҙар булыр инеме икән? М.Фәйзиҙең «Аҫылйәр» спектаклендә — Шәрәфетдин, Рафаэль Сафин пьесаһы буйынса ҡуйылған «Ҡыр ҡаҙҙары» спектаклендә — Байбулат, Н.Ғәйетбаев пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән «Шундай оҙаҡ көттөм һине» спектаклендә — Әшрәф, «Ҡарағол»да (Д.Юлтый) — Кузьма, Әнғәм Атнабаев пьесаһы буйынса ҡуйылған «Ул ҡайтты» спектаклендә — Хәмит, Мостай Кәрим әҫәрҙәре буйынса сәхнәләштерелгән «Киске табын» һәм «Айгөл иле» спектаклдәрендә — Хәтмулла һәм Ябағаев, Ф.Бүләковтың «Әбейҙәргә ни етмәй?», «Ҡанатланып ос һин, толпарым!», «Бибинур, ах, Бибинур!» пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙә — Абдулла, Толпар һәм Вилдан ролдәре; унан инде — Великатов («Аҡ ҡанатлы хыялым», А.Островский), Кудимов («Өлкән улым», А.Вампилов), Прозоров («Апалы-һеңлеле өсәү», А.Чехов), Исак («Йәш йөрәктәр», Ф.Бурнаш), Тимербай («Их, Байтимер дуҫ...», Р.Кинйәбаев) һ.б. Былар артист уйнаған ролдәрҙең бер нисәһе генә, барыһын да һанап бөтөрөү мөмкин түгел, театрҙа йылына өр-яңы дүрт-биш спектакль ҡуйыла, ә Илдар Сәйетов уларҙың күбеһендә ҡатнаша.

Илдар ағайҙың Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләй башлауына ла сирек быуатҡа яҡын ваҡыт үткән. Күрәһең, хәйерле сәғәттә театрға аяҡ баҫҡандыр, шуға ла уның ижад яҙмышы бәхетле. Ә эшенә мөкиббән ғашиҡ кеше булараҡ, үҙенең һөйөүен йылдар аша түкмәй-сәсмәй бөгөнгө көнгә еткергән артист Илдар Сәйетовты сәхнә Аллаһы үҙе ҡурсалай кеүек.

Йылдар бәйләменә күҙ һалып, артист үҙенең уйнаған ролдәрен барлай. Уларҙың һәммәһе лә ҡәҙерле — ике тиҫтә йылдан артыҡ Илдар ағай үҙенең геройҙары аша тамашасыларға мөрәжәғәт иткән, улар аша замандаштары менән уртаҡ тел тапҡан, кешеләрҙең ҡатмарлы яҙмыштарын һынландырып, үҙенең дә ижадын театр йылъяҙмаһынан айырылғыһыҙ итеүгә өлгәшкән.

Илдар Сәйетов — тынғыһыҙ актер, һәр ролендә актерҙың сәхнә тәжрибәһенә таянып эш итеүе, сәхнә ҡанундарын тәрән белеүе, даими эҙләнеүҙәре һәм тормошҡа, ижадҡа шәхсән ҡарашы ярылып ята. Театрҙың бөгөнгө репертуарында ла ең һыҙғанып ижад итә ул — «Нәркәс» (И.Йомағолов, режиссеры — Илдар Ғиләжев) мелоромантик трагедияһында — Байымбәт һәм Ялсығол, «Айғырыңды үтескә бир!» (Р.Кинйәбаев, режиссеры — М.Рабинович) комедияһында — Хәмиҙулла, «Һуңғы ғәйнә» (А.Иҙелбаев, режиссеры — Илдар Ғиләжев) музыкаль-романтик драмаһында — Шахгәрәй, «Башмағым» (Х.Ибраһимов, режиссеры — Илдар Ғиләжев) музы-

каль комедияһында — Городовой, «Ҡыҙыл йондоҙ» (М.Ғафури, Н.Ғәйетбаевтың сәхнә редакцияһында, режиссеры — Айрат Абушахманов) драмаһында — Милиционер, «Ҡатынымдың исеме Морис»та (Р.Шарт, режиссеры — Фәрит Бикчәнтәев) — Жорж, «Йәрең көнләп, ғәйбәт һөйләп...» (К.Гольдони, режиссеры — М.Күлбаев) спектаклендә — Падрон Тони, «Мәһәре — байҙан!» (Ю.Болат, режиссеры — Рөстәм Хәкимов) музыкаль комедияһында — Хәсәп Хәсән, «Кәкүк ояһы» (Кен Кизи, режиссеры — Айрат Абушахманов) психологик триллерында Чесвик ролдәрен башҡара.


*"День хомячка" фильмында полковник Безухов — И.Сәйетов*

Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Сәйетов — ҙур ҡаҙаныштарға ирешкән ижадсы. Ил күләмендәге фестиваль-конкурстарҙа ҡатнашып, лауреат исемдәренә лайыҡ булған актерҙың сығышын республикабыҙҙа ғына түгел, һәр тарафта ла тамашасы көтөп ала.

Кино сәнғәтендә лә әүҙемлек күрһәтә ул. Артист үҙе был хаҡта: «Кино — ул бөгөнгө көндә башҡа төбәктәрҙә лә танылыу өсөн, башҡорт артистарын оло донъяға алып сығыуҙың иң уңай юлы, артабан был тармаҡ тағы ла үҫеш алыр», — тигән ышанысын белдерә. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа төшөрөлгән фильмдарҙа полковник Безухов («День хомячка», режиссеры — В.Мөхәмәтйәнов), Омар («Медведь», режиссеры — Б.Йосопов) ролдәре айырыуса уңышлы булды.

Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Сәйетов 1992 йылда төрки телле театрҙарҙың II Халыҡ-ара «Туғанлыҡ» фестивалендә «Бибинур, ах, Бибинур!» спектаклендәге Вилдан роле өсөн Гран-приға лайыҡ була. Ул — Башҡортостан Республикаһы Театр эшмәкәрҙәре союзының Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге премияһы лауреаты, 2004 йылда «Айғырыңды үтескә бир!» (Р.Кинйәбаев) комедияһында — Хәмиҙулла, «Әкәмәтле һөйөү»ҙә (Лопе де Вега) Рикардо һәм «Ҡатынымдың исеме Морис» спектаклендә Жорж ролдәрен уңышлы башҡарғаны өсөн Татарстан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының «Йыйын» фонды булдырған Дамир Сиражиев исемендәге премияға лайыҡ булды.

«Уйнаған ролдәрегеҙҙән, бөгөнгө ижадығыҙҙан ҡәнәғәтһегеҙме?» — тигән һорауға Илдар Ширҡәт улы: «Ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисергән саҡтар булғылай. Ләкин был үҙ мөмкинлектәремде тулыһынса тормошҡа ашыра алдым, тигәнде аңлатмай. Иң яҡшы ролдәрем уйналмаған әле, тип уйлайым. Хәйер, үҙ-үҙеңде артыҡ эстән ашап, бөтөрөнөргә лә ярамай, тип иҫәпләйем. Бөгөнгө көндә яраткан коллективым менән эшләү, режиссерҙарҙың ышанысын, тамашасыларҙың өмөтөн аҡлау — былар бөтәһе лә, әгәр уны баһалай белһәң, үҙе бәхет бит ул. Ә ижадымдан тулыһынса ҡәнәғәт түгелмен. Тағы ла яҡшыраҡ уйнағы килә», — тип яуап бирҙе.

Уйнайһы ролдәрегеҙ, яулайһы үрҙәрегеҙ, алҡыштарҙан театр залдарын яңғыратаһы көндәрегеҙ алда әле, тип әйтәһе килә Илдар Ширҡәт улына.